МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерства образования и науки Республики Башкортостан

Администрация городского округа город
Нефтекамск Республики Башкортостан

Муниципальное общеобразовательное автономное учреждение
средняя общеобразовательная школа №11
городского округа город Нефтекамск Республики Башкортостан

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
| --- | --- | --- |
| на заседании ШМО<br>руководитель ШМО<br>учителей родных языков и литературы и ОДНК НР | Заместитель директора по учебной работе<br>МОАУ СОШ №11 | Директора МОАУ СОШ №11 |
| ____________________<br>/И.Ф. Валиева/<br>Протокол №1 от 30.08. 2024г. | ____________________<br>/Р.Р.Ямалтдинова /<br>Протокол МС №1 от 30.08.2024г. | ____________________<br>/И.Г. Аллаяров/<br>Приказ №576 от 30.08.2024г. |

ДОКУМЕНТ ПОДПИСАН
ЭЛЕКТРОННОЙ ПОДПИСЬЮ

Сертификат: 00E04301A6D9BD4262D6EC61772058B4B2
Владелец: Аллаяров Илдар Габидович
Действителен: с 19.06.2024 до 12.09.2025

# КОНТРОЛЬНО-ОЦЕНОЧНЫЕ СРЕДСТВА

## по учебному предмету
## «Государственный (башкирский) язык Республики Башкортостан»

для обучающихся 6 класса

**г. Нефтекамск, 2024**

# Аңлатма яҙыу

Тикшереү эшенең текстары дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына. Тикшереү эше һәр уҡыусының алдында булырға тейеш.

Тикшереү эшенең йөкмәткеһе һәм структураһы түбәндәге документтарға таянып төҙөлдө:

1**.** "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законы №273-ФЗ, 29.12.2012й.

2. Нефтекама ҡалаһы 11-се мәктәптең муниципаль дөйөм автономия белем биреү учреждениеһының уҡыу планы.

3. "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" законы (№1807, 25.10.1991й.).

4."Башҡортостан республикаһы халыҡтары телдәре тураһында " БР Законы (216 –З, 15.02.1999 й.)

5. Төп дөйөм белем биреүҙең төп белем биреү программаһы.

6. Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡытыу рус телендә алып барылған 5-9 кластар өсөн Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле уҡыу предметы буйынса дөйөм белем биреү өлгө программаһы.

7. Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы.

8. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы коллегияһы ҡарары 29.08. 2024 йыл.

Контроль эшенең структураһы һәм үтәлеү ваҡыты.
Тикшереү эше 1 өлөштән тора.

Контроль эште башҡарыу өсөн 40 минут бирелә.

Өҫтәлмә материалдар һәм күргәҙмәлек ҡулланылмай.

Башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары
Тикшереү эшендә биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш ителергә тейеш:

1. Яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
2. Үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
3. Яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының яҙма рәүештә биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә,билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1. Тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
2. Үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;
3. Материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, уның яуабы **«5» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк - һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы «**4» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә,ләкин

1. Материалды тулы аңлата алмаһа,төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2. Әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
3. Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа,телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, уның яуабы **«4» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен, билдәләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебәрһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, уның яуабы «**2» билдәһе** менән баһалана

**Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн**

Әгәр уҡыусы «4» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк - һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, уның яуабы **«5» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә,ләкин

1. Материалды тулы аңлата алмаһа,төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2. Әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;

Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа,телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, уның яуабы **«3» билдәһе** менән баһалана.

**Комплекслы инеш контроль эше.**

1. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ.

Иртән

Һоҡланғыс й...йге иртә. Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояш нур...арында, һарғылт йәшел тө..кә инеп, әкрен генә томан күтәрелде. Күҙ яуын алып, үл...н баштарында ысыҡ емелдәй, әйтерһең дә, аяҡ аҫтына һанһыҙ ынйы бөртөктәре һипкәндәр. Тәбиғәт әкренләп йоҡонан уяна. Ҡайҙалыр алыҫта һайыҫҡан шыҡырлағаны ишетелде. У...а яуап ҡайтарғандай, ике тап...ыр кәкүк тә саҡырып ҡуйҙы.

Туғайҙан һанду...ас йыры ишет...лде. Шуны ғына к...ткәндәй, таллыҡта турғайҙар сутырлаша башланы. Бар тереклеккә ҡыуаныс һәм өмөт биреп, яңы яҡты к...н тыуҙы.

2) Һүҙҙәрҙе тәржемә итеп яҙығыҙ ;
Йәй, нур,томан, күҙ, тәбиғәт,кәкүк,йыр,һандуғас
3)Бирелгән һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөргә;
Ҡояш,йәшел, турғай, яҡты, өмөт

4) Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.
А) Көҙ, етте, алтын
Б) Ағас, һарғая, сентябрҙә, япраҡтары.
В)Быҫҡаҡлап, яуа, ямғыр.
Г)Ҡырау,төшә

Яуаптары:

Иртән

1.Һоҡланғыс йәйге иртә. Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояш нурҙарында, һарғылт йәшел төҫкә инеп, әкрен генә томан күтәрелде. Күҙ яуын алып, үлән баштарында ысыҡ емелдәй, әйтерһең дә, аяҡ аҫтына һанһыҙ ынйы бөртөктәре һипкәндәр. Тәбиғәт әкренләп йоҡонан уяна. Ҡайҙалыр алыҫта һайыҫҡан шыҡырлағаны ишетелде. Уға яуап ҡайтарғандай, ике тап...ыр кәкүк тә саҡырып ҡуйҙы.

2. Йәй, нур,томан, күҙ, тәбиғәт,кәкүк,йыр,һандуғас
Лето, луч, туман, глаз, природа, кукушка, песня, соловей.

3. Ҡояш,йәшел дәфтәр, бәләкәй турғай, яҡты бүлмә, көтөлгән өмөт
Мөләйем ҡояш,
4. Алтын көҙ етте. Сентябрҙә ағастарҙың япраҡтары һарғая.
Быҫҡаҡлап ямғыр яуа.Ҡырау төшә.

**Комплекслы йыллыҡ контроль эше.**

1. Ялғауҙар өҫтәп яҙ.

Баҡсаһы һәм уның улдары.

Бөгөн уҡыусылар мәктәп баҡсаһында эшләнел…. Балалар сейә, ҡарағат төптәрен йомшартты…. Улар кишер, сөгөлдөр түтәлдәрен утаны... Мәктәп баҡсаһында мәк, астра, ләлә сәскә…е үҫә. Сабир, Әнисә һәм Гөлйөҙөм һыу ташыны…. Гүзәл менән Әлфиә түтәлдәргә һыу һипте... Уҡыусылар тырышып эшләне….

2. Бирелгән һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ
8,56,64,71,83,97,100,202,2020

3. Буш нөктәләр урынына **йы,йе** ҡушымсаларын ҡуйып яҙығыҙ

Бы....л
Бе....к
Ҡы....ҡ
Те.....н
....лға
....лан
Му...л

4. Һүбәйләнештәрҙе тәржемә итегеҙ

Йәй көндәре
Китап уҡыйым
Сәскәле ялан
Тыуған ерем
Башҡорт егете
Ҙур ҡала

Яуаптары:

1.Бөгөн уҡыусылар мәктәп баҡсаһында эшләнеләр. Балалар сейә, ҡарағат төптәрен йомшарттылар. Улар кишер, сөгөлдөр түтәлдәрен утанылар. Мәктәп баҡсаһында мәк, астра, ләлә сәскәләре үҫә. Сабир, Әнисә һәм Гөлйөҙөм һыу ташынылар. Гүзәл менән Әлфиә түтәлдәргә һыу һиптеләр. Уҡыусылар тырышып эшләнеләр.

2. Һигеҙ, илле алты, алтмыш дүрт, етмеш бер, һикһән өс, туҡһан ете, йөҙ, ике йөҙ ике, ике мең егерме.

3. Быйыл
Бейек
Ҡыйыҡ
Тейен
Йылға
йылан
Муйыл

4. Йәй көндәре –летние дни
Китап уҡыйым – читаю книгу
Сәскәле ялан – цветочная поляна
Тыуған ерем – родная земля
Башҡорт егете – башкирский парень
Ҙур ҡала – большой город